## Авторские произведения Забитовой Асии Ринатовны, воспитанницы МДОБУ ЦРР д/с «Аленушка» г. Сибай Республики Башкортостан

### Һорокай

Тыуған көнөмә инәйем
Бүләк итте бер бесәй.
Үҙе йомшаҡ, һоро ғына,
Исем ҡуштым Һороҡай.
Эй шаяра минең бесәй,
Ырғый, йүгерә, әйләнә.
Өләсәйҙең йомғағына
Сысҡан тиеп бәйләнә.
Арыһа ул, йоҡлап китә,
Һөтөн эсә, асыҡһа.
Матур бүләк бесәйемде
Яратырмын гел генә!

### Рыжик

На день рождения тетя
Подарила мне котенка.
Он рыженький, пушистый,
И назвали Хорокай.
Шалунишка мой котенок,
Резвится, бегает,
Бабушкины клубочки
Как мышей гоняет.
Молочко он обожает,
И уставши, засыпает.
Любимый комочек мой,
Всегда я рядом с тобой!

### Тыңлауһыҙ ҡуянҡас (Әкиәт)

Борон – борон заманда түгел, бөгөнгө көндәрҙә, йәшәгән, ти, Ҡуянҡас исемле малай. Был малай бик тыңлауһыҙ булған, әсәһенең бер һүҙен дә ҡолағына элмәгән.

Шулай бер ҡөндө әсәһе эшкә барырға ашыға икән.

- Улым, мин эштә саҡта өй тирәһенән бер ҡайҙа ла китмә, ишек алдында ғына уйна. Төлкөбикәнең балалары менән уйнама, әсәләре бик яуыз, - тигән дә эшкә киткән.

Ҡуянҡас тәүҙә өй янынан алыҫ китмәгән, шунда ғына уйнаған. Өйҙә лә бер үҙенә күңелһеҙ булғас, түҙмәгән, урамға сығып йүгергән. Ә унда!!! Төлкөбикәнең бәләкәстәре туп тибеп уйнай икән. Ҡуянҡас, ҡурҡыныс янауын да онотоп, улар янына барған. Эх, күңелле уйнағандар, тирләп – бешеп туп типкәндәр! Уйнап, Төлкөнөң балалары ла, Ҡуянҡас та бик асыҡҡандар, арығандар. Төлкө балалары тамаҡ ялғап алырға уйлап, өйҙәренә ыңғайлағандар. Ҡуянҡас та, бик асыҡҡанлыҡтан, күп уйлап тормаған, яңы дуҫтарына эйәргән. Ә унда Төлкөбикә үҙенең балаларын ҡаршы алып тора икән. Төлкөбикәнең яуыз, уҫал ҡарашын күреп, Ҡуянҡастың әсәһе әйткән

һүҙҙәре ҡапыл иҫенә төшкән. Шул арала Төлкөбикә Ҡуянҡасҡа ҡарай атлаған. Ҡуянҡас, кире әйләнеп, өйө яғына бар көсөнә сапҡан. Ул бар көс – хәленсә йүгереп, саҡ ҡотолған. Ул ваҡытта әсәһе лә эштән ҡайтҡан булған. Ҡуянҡас әсәһен күреп, үкһеп илап ебәргән:

- Әсәкәйем, ғәфү ит мине, башҡаса һинең һүҙеңде йыҡмам, гел тыңлап ҡына йөрөрмөн, - ти икән.

Әсәһе малайын йылы ҡосағына алып тынысландырған, иркәләткән. Улының хатаһын аңлауына әсәһе лә ҡыуанған, сөнки был көн Ҡуянҡас өсөн мәңгелек һабаҡ булған: ул хәҙер әсәһен тыңлап ҡына йөрөй икән.

## Непослушный зайчонок (Сказка)

Жил-был зайчонок по имени Куянкас. Рос он очень непослушным, капризным, что бы не говорила мама Зайчиха, в одно ухо влетало, из другого вылетало.

Однажды зайчиха, собираясь на работу, сказала сыночку:

- Сыночек, пока я на работе, от дома далеко не уходи, играй только во дворе. И не играй с лисятами, мать у них очень злая, - и поторопилась на работу.

Сначала Куянкас играл во дворе, как говорила мама, далеко не уходил. Но затем ему стало скучно играть одному, и он не вытерпел – выбежал на улицу. А там!... Лисята весело играли в футбол. И Куянкас, забыв про все на свете, подошел к ним. Очень весело им игралось, устали, проголодались. Лисята направились к себе домой, чтобы пообедать. Не долго думая, проголодавшийся Куянкас пошел за новыми друзьями.

Возле дома лисят встречала Лисица. И как только увидел злой, высокомерный взгляд Лисицы, Куянкас сразу вспомнил слова матери. Только лисица шагнула навстречу зайчонку, он со всех ног бросился домой от страха. К этому времени и зайчиха вернулась с работы домой. Куянкас, увидев маму, сильно расплакался:

- Мамочка, прости меня, пожалуйста, больше никогда не ослушаюсь тебя, всегда-всегда буду слушаться! Зайчиха нежно обняла сыночка, прижала к себе, успокоила его. С тех пор Куянкас стал послушным.